| **ФИО педагогов, имеющих публикации** | **Названия статьи, место издания и месяца** |
|---|---|
| Еникеева Дилара Ураловна,<br>инструктор по физической культуре | “Башҡортса йәнһүрәт ҡарағыз!”<br>Газета “Атайсал”, 07.09.2018 г., №36 |
| Кульмухаметова Равиля Ирековна, воспитатель | “Һоҡландырҙы ғаиләләр”<br>Газета “Атайсал”, 05.10.2018 г., №40 |
| Аметова Райля Маратовна,<br>педагог-психолог | “Ярҙам итергә әҙербеҙ”<br>Газета “Атайсал”, 19.10.2018 г., №42 |
| Кулембетова Фидалия Шагитовна, воспитатель | “Әкиәт терапияһы”<br>Газета “Атайсал”, 15.03.2019 г., №11 |
| Зигангирова Гульнара Маратовна,<br>Зубаерова Янбика Гиниятовна, воспитатели | “Нәҫелдәр тарихын данлап”<br>Газета “Атайсал”, 29.03.2019 г., №13 |
| Харисова Мавлида Рафиковна,<br>старший воспитатель | “Уйнап өйрәнәбеҙ”<br>(мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем биреүҙә заманса технологиялар) |
| Харисова Мавлида Рафиковна,<br>старший воспитатель<br>Зигангирова Гульнара Маратовна, воспитатель | “Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәр үҫешендә моделләштереү алымы” |
| Аметова Райля Маратовна,<br>педагог-психолог | “Балалар баҡсаһында тән өлөштәренә йүнәлтелгән терапияны ҡулланыу” |
| Зигангирова Гульнара Маратовна | “Башҡортостан буйлап сәйәхәт”<br>Газета “Атайсал”, 17.10.2019 г., №20 |

05.10.2018
№40.
Атайсал.

● 2018 йыл—Ғаилә йылы

# Һоҡландырҙы ғаиләләр

**Ғаилә ул—киләсәктең иң ышаныслы нигеҙе, беҙҙең бәләкәй генә дәүләтебеҙ, өйөбөҙ, атай-әсәйебеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ. Атай, әсәй—ғаиләнең тотҡаһы, ә балалар—көҙгөһө.**

«Аҡбуҙат» балалар баҡсаһында «Татыу ғаилә—донъя тотҡаһы» тигән сара үтте. Унда 7 ғаилә көс һынашты һәм үҙ ғаиләләренең берҙәм, татыу, дәртле булыуын күрһәтеүгә өлгәште. Конкурсанттарҙың сығышын мөдиребеҙ Р.F.Иҙрисова һәм тәрбиәселәр Г.М.Йыһангирова, Г.С.Рәмиева баһаланы. Сараны музыкаль яҡтан музыка етәксеһе Ә.Х.Иҫәндәүләтова биҙәне.

Иң беренсе ғаиләләр үҙҙәре менән таныштырҙы, нәҫелдәренә генә хас йолалар, тәрбиә алымдары хаҡында һөйләне. Артабан таланттарын күрһәтте. Мәҫәлән, Ишкининдар бергәләшеп бик матур йыр башҡарҙы, Буранбаевтар нәфис һүҙгә оҫта булыуҙарын иҫбатланы. Күләмбәтовтар иһә спортты үҙ итә икән, ә Үҙәнбаевтар каратэ буйынса уңыштарға өлгәшкән. Иғдәүләтовтар халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәтен хөрмәт итә, бишек йырын башҡарҙылар. Йыр-моңға маһир Ишъяровтарҙы ла ихлас ҡабул иттек. Байрам сараһына өләсәй-олатайҙарын да алып килгән Кирәйевтар ҡурай моңона сорнаны..

—Бөгөн сәхнәгә сығырға йөрьәт иткән ғаиләләр үҙҙәренең йәшлек дәрте, берҙәмлектәре менән алдырҙы. Артабан да ғаилә усағығыҙҙы һүрелдермәй, балаларығыҙға матур тәрбиә бирегеҙ, бар яҡтан өлгөлө булығыҙ,—тигән изге теләктә байрамға килеүсе һәр ғаиләгә Почет грамоталары тапшырылды.

Күелле сара мул табын артында тамамланды.

*Р.Колмөхәмәтова,*
*«Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.*

● Тәрбиә

# Башҡортостан буйлап сәйәхәт

**Сибай ҡалаһының «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы тәрбиәселәре Башҡортостан Республикаһы төҙөлөүенә 100 йыл тулыуға арнап ҡалала «Башҡортостан буйлап сәйәхәт» исемле квест-уйыны ойошторҙо.**

Сара ҡаланың Еңеү паркында үткәрелде. Унда Сибайҙағы балалар баҡсаларынан башҡорт төркөмдәрендә эшләүсе тәрбиәселәр ҡатнашты. Сараны алып барыусылар М.Ә.Аҫылбаева һәм Й.F.Зөбәйерова матур итеп квеста ҡатнашыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы сәләмләне. Уйынды ойоштороусылар Д.У. Йәнекәйева, Р.И.Ҡолмөхәмәтова, Ә.Ш.Хәсәнова, Ә.Ә.Ташбулатова, З.М.Харисова, Г.Р. Ҡунаҡбаева сараны юғары кимәлдә үткәреүҙә тос өлөш индерҙе. Квест уйынында ҡатнашыусылар төрлө ҡаршылыҡтарҙы үтеп, республикабыҙҙы айҡап сыҡты. Ер-һыу атамаларына ҡыҙыҡлы белемдәрен тикшерҙе, «Башҡортостан» һүҙенән башҡа һүҙҙәр йыйҙы, тәбиғәткә ҡағылышлы һораударҙы кроссворд, ребустар аша таптылар.

Ҡала мәғариф бүлеге методисты Л.Ш.Янбаева ҡатнашыусыларҙы, ойоштороусыларҙы маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләне. «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы педагогтарына рәхмәт һүҙен белдерҙе.

Килгән ҡунаҡтар, квеста ҡатнашыусылар яҡшы кәйеф, дәрт менән таралышты.

*Г.Йыһангирова,*
*башҡорт төкөмдәренең методик берекмәһе етәксеһе.*

# Ҡуҙғалаҡ байрамы— боронғо йола

**Ҡуҙғалыҡ байрамы... Уны борон, көн йылып, тау биттәре ҡарҙан әрселгәс, ҡорбан салып бөтә ауыл менән тәбиғәттә үткәргәндәр. Ҡуҙғалаҡ, балтырған йыйыр алдынан шул урынды ауырыу-зәхмәттән таҙартып алғандар. Муйыл ағасының сыбыҡ-сатырын йыйғанда: «Ауыҙың ас, Зәңге ҡас. һәс, һәс, һәс! Ҡас, ҡас, ҡас!»—тип һамаҡлағандар.**

# Уйна, ҡурай

**Башҡортостан Республикаһы төҙөлөүгә 100 йыл тулыу уңайынан, бик күп саралар уҙғарыла. Унан балалар баҡсаһы ла ситтә ҡала алмай.**

Сибай ҡалаһының «Аҡһылыу» балалар баҡсаһында, мәҫәлән, «Уйна, ҡурайҡайым» исемле про-

Атайсал 29 март 2019 йыл, № 13



● Шәжәрә

**Шәжәрә—ул ырыу тарихы. Һәр ырыуҙың үҙ исеме булған. Башҡорт халҡы элек-электән үҙ нәҫеленең тарихын яҙып ҡалдырған. Шәжәрәлә бөтә ир-ат исемдәре күрһәтелгән. Беҙҙең олатай-картатайҙарыбыҙ үҙҙәренең оло туғандарының исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. Ошо ағас теге йәки был нәҫел-ырыуҙың тормошон сағылдырған. Уның тамыры—үткәнебеҙ, олоно—бөгөнгөбеҙ, тармаҡлы ботаҡтары—киләсәгебеҙ.**

# Нәҫелдәр тарихын данлап

Башҡортостандың 100 йыллығы айҡанлы Сибай ҡалаһының «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһының һәр төркөмө бай йөкмәткеле төрлө проект эштәре менән шөғөлләнгән. Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә тәрбиәләнеүселәр үҙҙәренең нәҫел ептәрен барлау өҫтөндә ҙур эш атҡарып сыҡҡан. Шәжәрә ағасын төҙөүҙә уларға ата-әсәләре, картатай-өләсәйҙәре булышлыҡ иткән. Төркөмдә 30 бала булһа, шуларҙың 28-ҙе үҙ нәҫеленең шәжәрәһе менән таныш. Күптән түгел беҙгә әҙерлек төркөмө тәрбиәселәре Гөлнара Марат ҡыҙы Йыһангирова, Йәнбикә Ғиниәт ҡыҙы Зөбәйерова һәм музыка етәксеһе Әлимә Хәлит ҡыҙы Иҫәндәүләтова ойошторған «Шәжәрә» байрамын ҡарау бәхете тейҙе.

Сараға саҡырылған ҡунаҡтар тәүҙә фойела урынлашҡан төрлө нәҫел-ырыуҙарға бағышланған шәжәрә ағасы күргәҙмәһен ҡараны. Артабан барыһы ла ҙур залға үтте. «Минең тамырҙарым» тип аталған әҙәби-музыкаль кисәлә ҡатнашыусы ҡыҙ һәм малайҙар илебеҙҙе, телебеҙҙе, халҡыбыҙҙы һәм яҡын туғандарын данлап матур йырҙар йырланы, бейене һәм шиғырҙар һөйләне. Ҡунаҡтар милли кейемдәр кейгән, сәстәренә сулпылар таҡҡан матур ҡыҙҙарға һәм баштарына түбәтәйҙәр кейгән сая малайҙарға ҡарап хайран ҡалды. Йырмоңға маһир ата-әсәйҙәрҙең сығыштары сараға йәм өҫтәне. Шәжәрә байрамы Гөлнара Йыһангирова ижад иткән «Бәхет ҡуласаһы» йыры менән тамамланды.

Артабан һүҙҙе Сибай ҡала башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы Таңһылыу Ғәйнуллина алды. Ул балаларға арнап яҙған шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе, балаларын милли рухта тәрбиәләгән ата-әсәләргә уңыштар теләне. Ҡала мәғариф бүлеге методисы Лилиә Шаһыбал ҡыҙы Янбаева үҙ сығышында «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы мөдире Р.Ғ.Иҙрисоваға, методист М.Р.Харисоваға, берҙәм коллективҡа фәһемле сара ойоштороуҙары өсөн рәхмәт белдерҙе.

*Альбина Таһирова.*

● Беҙгә яҙалар

# Башҡортса йәнһүрәт ҡарағыҙ!



**Бала сағыбыҙҙы хәтерләткән «Йәнһүрәт башланды!»,—тигән һүҙҙәрҙе онотоу мөмкин түгел. Уйнап йөрөгән ерҙән, өйгә йүгерешеп ҡайтып, зәңгәр экрандар алдына йыйылыр инек. Мөғжизәле әкиәттәр донъяһы, төрлө образдар беҙҙе сихри донъяға алып китә ине...**

Хәҙерге заманда зәңгәр экрандарҙан йәнһүрәттәрҙе көнө буйы ултырһаң да ҡарап бөтөрләк түгел. Улар күплеге һәм төрлөлөгө менән хайран ҡалдыра. Әммә балаға аңлашылып етмәгән, ҡатмарлы сюжетлы, әхләҡи яҡтан кире йоғонто яһаған йәнһүрәттәр күберәк урын биләй. Көсһөҙҙө көслө йәберләй, яҡшыны яманлыҡ, яһиллыҡ еңә, аяуһыҙ итеп туҡмауҙар, машинанан тапап үткәс кире килеп тороуҙар, геройҙарҙың бер-береһенә тик мутлыҡ уйлап йөрөүе лә әле генә формалаша башлаған бала психикаһына кире йоғонто яһамай ҡалмай. Балаларҙың бер-береһенә булған мөнәсәбәттәрендә шул йәнһүрәт геройы кеүек ҡыланыуҙы, тупаҫ мөғәмәләне күрергә була. Үҙебеҙҙең бала саҡта ҡараған изгелекле, яғымлы, яҡшылыҡҡа өндәгән йәнһүрәттәр зәңгәр экрандарҙа юғала бара.

Шуның өсөн дә коллегам, «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы педагог-психологы Әмәтова Рәйлә Марат ҡыҙы менән кәңәшләшкәндән һуң, башҡорт телендә йәнһүрәт төшөрөргә булдыҡ. Беҙ «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһына ҡыҙын йөрөтөүсе атай Көмөшҡолов Руслан Самиғулла улы (оператор), ҡасандыр беҙҙең балалар баҡсаһына йөрөгән бала, 9-сы лицей уҡыусыһы Зөбәйерова Наҙгөл ҡатнашлығында пластилин һәм уйынсыҡтар ярҙамында башҡорт халыҡ әкиәте «Ирәндек» мотивына ҡоролған йәнһүрәт эшләнек. Уның аша тыуған телгә һөйөү тәрбиәләү, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады һәм тыуған ҡалабыҙҙы уратып алған хозур тәбиғәтле мөхит менән таныштырыу беҙҙең төп маҡсат булып торҙо. Үҙебеҙҙең балалар баҡсаһы кескәйҙәре тәүге тамашасылар булды. Йәнһүрәт бәләкәстәр тарафынан бик йылы ҡабул ителде.

Үткән йылда «БашМульт-2017» II Башҡорт фестивале сиктәрендә үткәрелгән асыҡ конкурста «Ирәндек» йәнһүрәте менән ҡатнашып, тамашасы һөйөүен яулап, кубок һәм дипломдар менән бүләкләнгәйнек.

Быйыл Бөрө ҡалаһында «Йәнһүрәт фестивале-2018» үтте. Уны «Ток-центр Умникум» анимациялар студияһы ойоштороҙо. Фестиваль географияһы төбәк сиктәренән сығып, Бөтә Рәсәй фестивале статусын алды. Беҙ «Ирәндек» йәнһүрәте менән ошо фестивалдә ҡатнашып, «Ҡурсаҡ Маша» номинацияһында беренсе урынды яулап, дипломдарға лайыҡ булдыҡ. Ә инде дөйөм күрһәткестәр буйынса Гран-при кубогы менән бүләкләндек.

Шулай итеп, күңел һалып, тырышып йәнһүрәт эшләүебеҙ бушҡа булманы. Әкиәттәге изгелек яҡлы Оморҙаҡ яҡшылыҡҡа өйрәтһә, комһоҙ Бай балаларҙы яманлыҡтан, яһиллыҡтан ҡурсалай.

Беҙ эшләгән башҡорт телендәге йәнһүрәт күңелдән мәңге юйылмаҫ сихри балалар донъяһында матур эҙ ҡалдырыр тип ышанабыҙ.

*Дилара Йәнекәйева,*
*«Аҡбуҙат» балалар баҡсаһының физик тәрбиә биреү инструкторы.*

*Һүрәттә: Д.У.Йәнекәйева, Н.Зөбәйерова, Р.М.Әмәтова.*

● Мәғлүмәт

# Ярҙам итергә әҙербеҙ

**Сибай ҡалаһы «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһында 2 йәштән 7 йәшкә тиклемге кескәйҙәр өсөн консультация үҙәге асылды. Уның маҡсаты: балалар баҡсаһына йөрөмәгән бәләкәстәр, уларҙың ата-әсәләре (законлы вәкилдәре) өсөн консультацион ярҙам күрһәтеү тора.**

Билдәле булыуынса, балалар барыһы ла мәктәпкәсә белем-тәрбиә алырға тейеш. Ләкин билдәле сәбәптәр арҡаһында (бала йыш ауырый, финанс көрсөгө, ғаилә хәлдәре һ.б.) өйҙә ултырыусы кескәйҙәр һаны көндән-көн үҫә бара. Ошондай хәлгә ҡалғандар өсөн, уларҙы тәрбиәләүсе ата-әсәләргә (законлы вәкилдәргә) баланы дөрөҫ тәрбиәләүҙә килеп тыуған һорауҙарға яуап табырға ярҙам итеү—консультация үҙәгенең төп бурысы.

Ярҙамды балалар баҡсаһында эшләүсе педагогтар, уҡытыусы-логопедтар һәм, ата-әсәләр (законлы вәкилдәр) һорауы буйынса, башҡа белгестәр күрһәтә ала.

Әгәр ҙә һеҙҙе сабый тәрбиәләүҙә ниндәйҙер һорауҙар борсой икән, шылтыратығыҙ, шулай уҡ балалар баҡсаһының сайтына инеп, һорауҙарығыҙҙы ҡалдыра алаһығыҙ. Балалар баҡсаһында эшләүсе белгестәр ярҙамы бөтөнләй түләүһеҙ. Консультацион ярҙам кесаҙна 13.00-14.00, ә йома көнө 14.00-15.00 сәғәткә тиклем ойошторола.

Шулай уҡ ҡаланың бөтә баҡса ойошмаларында ла был хеҙмәт күрһәтелә башланы. Йәш әсәйҙәр, иртә йәштәге кескәйҙәр, мәктәпкә әҙерләнеүселәр өсөн фәһемле булыр тип уйлайбыҙ.

Мөрәжәғәт итегеҙ! Ярҙам итергә һәр саҡ әҙербеҙ!

***Рәйлә Әмәтова,***
***педагог-психолог.***

Тәрбиә

# Уйын — бала саҡтың алтын биҙәге

**Халҡыбыҙ борон-борондан киләсәк быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. «Ҡарға бутҡаһы», «Кәкүк сәйе» һәм башҡа байрамдарҙы, уйындарҙы балалар үҫешһен өсөн ойошторған.**

Көндәлек тормошта ла сабыйҙарҙың донъяны танып белеүендә, физик һәм рухи яҡтан үҫешендә, дуҫлыҡ, берҙәмлек хистәре тәрбиәләнеүендә, һәләттәрен асыуҙа, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәтеүҙә уйындар ярҙамға килә. Тәрбиә эшендә дөрөҫ алымдар ҡулланғанда ғына көслө һәм үҙ аллы шәхесте үҫтерергә мөмкин. Күп осраҡта тәрбиәне ололарҙан кескәйҙәргә бирелә торған белем тип тә ҡарайҙар. Бала иң элек ата-әсәһенә ҡарап фәһем ала, уларҙың ҡылыҡтарын ҡабатлай. Әлбиттә, һәр ата-әсә балаһының иң яҡшы, аҡыллы булыуын теләй. Бының өсөн үҙҙәре өлгө булып торорға тейеш.

Артабан тәрбиәгә балалар баҡсаһы, мәктәп кеүек белем усаҡтары булышлыҡ итә.

Халыҡ ижады өлгөләре — әкиәт, һөйҙәргәс, һамаҡлау, уйындар, мәҡәлдәр ҙә күркәм холоҡ тәрбиәләүгә юл аса.

Сибай ҡалаһының "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында кескәйҙәрҙе илһөйәр, телһөйәр, кешелекле, кеселекле, ололарҙы ихтирам итеүсе һәм башҡа бик күп матур сифаттарға эйә булыусы итеп тәрбиәләү өсөн эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Бының өсөн, тәрбиәсенең үҙенең дә ошо сифаттарға эйә булыуы мотлаҡ.

Сабый балалар баҡсаһына йөрөй башлау менән тәрбиәнең яңы мөмкинлектәре асыла. Бында тәрбиә һәм белем биреү эшмәкәрлеге милли педагогикаға таянып ойоштороla. Мәктәпкәсә йәштәге учреждениела бала ишетеп кенә түгел, күреп, үҙе лә шунда ҡатнашып үҫә, тәрбиәләнә. Тәрбиә сюжетлы-ролле уйындар, күргәҙмә-ҡулланыу материалдары, төрлө йүнәлештәге уйындар аша атҡарыла.

Балаларҙың өйҙә, балалар баҡсаһында ниндәй уйын уйнауҙарын күҙәтеп, белеп барыу мөһим. Уйындар, халыҡ ижадының бер өлгөһө булараҡ, баланы тормошҡа әҙерләргә, һөнәргә өйрәтергә, күркәм сифаттар тәрбиәләргә тейеш. Кешене белгең килһә — ҡылығына, баланы белгең килһә уйынына ҡара, тип юкка әйтмәй бит халыҡ мәҡәле.

Бала уйнаған саҡта үҙен нисек тотһа, үҫеп еткәс, эштә лә үҙен ул шулай тотасаҡ. Киләсәккә нигеҙ уйнаған ваҡытта һалына. Сөнки уйын ниндәй ҙә булһа тормош рәүешенә өйрәнеү, шул тормошҡа инеү сараһы.

***Фәнзилә Солтанова,***
***"Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.***

*Мәҡәлә түләүле нигеҙҙә баҫылды.

ПРАЗДНИК

# Минута славы логопедов



В минувший четверг в здании ЦДТ состоялось мероприятие, посвященное Международному дню логопеда, в котором приняли участие более 150 специалистов образовательных учреждений городов Сибая, Баймака и пяти близлежащих районов. Вот уже второй год организаторами этого замечательного праздника выступают городская психолого-медико-педагогическая комиссия совместно с горОО при поддержке Института развития образования РБ.

***НЫНЕШНЕЕ*** мероприятие отличалось тем, что расширилась география, выросло мастерство участников, острее стала конкуренция между ними. Еще одно новшество - привлечение психологов, чей

о которой уже объявлялось ранее (*на снимке*). Горожанам была предоставлена уникальная возможность проверить свое красноречие, выявить проблемы в речи и получить консультацию у высококвалифицированных специалистов: Н.Ф. Ахметшиной, М.А. Ахметовой, М.У. Суяровой, Г.Р. Елкибаевой, Л.А. Дементьевой, Л.Г. Бикметовой, Т.П. Пономаренко и Р.М. Аметовой. В данной акции приняли участие 28 человек.

***ВТОРАЯ*** часть мероприятия продолжилась в празднично украшенном актовом зале.

С приветственным словом выступила почетный гость праздника, заведующая кафедрой коррекционной педагогики ИРО РБ, кандидат психологических наук, доцент Э.Н. Абуталипова. Она вкратце рассказала об опыте работы зарубежных коллег и в конце добавила, что им все-таки есть много что перенять у наших логопедов.

Было отмечено, что цель

тами младенца глаголет истина).

С докладом о коррекционной работе в детских садах нашего города выступила методист отдела образования администрации ГО по дошкольному воспитанию М.З. Юнусова.

Были приведены такие цифры: на сегодняшний день в системе дошкольного образования Сибая трудятся 35 учителей-логопедов, в 15 детских садах действуют 14 логопедических групп, 22 логопедических пункта, в которых занимаются 489 дошкольников, имеющих проблемы с речью.

Специалисты С.Р. Ахметвалиева, Е.П. Иванова, О.Н. Вандина, Н.С. Пичнаграева провели очень интересный и содержательный семинар-практикум, наглядно отразивший эффективное использование совместных действий логопеда и психолога. За основу взяли телепередачу «Здорово жить», были представлены презентации и видеозаписи мастер-классов.

Далее программу продолжила конкурсная часть. Специалисты, объединившись в группы, представляли на суд зрителей и компетентного жюри презентацию своей профессии. Все участницы творчески отнеслись к выполнению домашнего задания. Каждая доказала, что достойна наивысшей оценки. Поэтому члены жюри единодушно при-

В ярких длинных сарафанах вышли «матрешки» («Теремок»), которые очаровывали публику задорным исполнением песен, частушек. Жюри единодушно присудило им номинацию «Золотой голос».

Третья команда («Акбузат») покорила всех прекрасным массовым выступлением на родном языке. Было видно, что воспитатели «горят» за своих логопедов. Они выиграли в номинации «Хранители традиций».

Со своей презентацией выступили и педагоги-психологи. Все замерли, когда на сцене девушки с зажженными свечами стали рассказывать красивую притчу... А потом психологи под зажигательную танцевальную музыку провели ритмическую паузу. Сумев вмиг поднять большую аудиторию, наши коллеги продемонстрировали свой профессионализм. Девушки стали победителями в номинации «Надежный тыл».

Следующая команда («Белоснежка», «Аленушка», «Айгуль», «Ляйсан», «Сулпылар») разыграла очень веселую историю из жизни насекомых, явно нуждающихся в логопедической коррекции... Звучали и стихи, и песни. По праву команде присуждена номинация «Творческий союз».

Шестая команда («Березка») показала очень интересные слайды самых ярких моментов своей коррекционной

ны уважаемые специалисты с многолетним стажем и огромным опытом работы - учитель-логопед Минникамал Азатовна Ахметова и педагог-психолог Татьяна Петровна Пономаренко. Церемония проходила в форме театрализованного представления. Молодые специалисты очаровали зал задорным исполнением частушек, марша, чтением стихов, оригинальностью в решении задач.

В конце заведующая Сибайской ПМПК Г.Н. Иксанова еще раз поздравила всех с праздником, пожелав крепкого здоровья, успехов в нелегком труде, терпения.

Огромную благодарность хочется выразить всем тем, кто помог в организации мероприятия, замечательным ведущим - Олесе Вандиной и Салиме Ахметвалиевой, благодаря которым праздник стал действительно незабываемым. Отдельное спасибо нашим спонсорам: магазинам «Школьник» (Г.С. Сафонова), «Флора» (А.Ш. Султангареева), «Орхидея» (А.Д. Климова).

***БОЛЬШИМ*** сюрпризом для всех стали концертные номера от гостей - студентов и преподавателей музыкального отделения педколледжа, эстрадного ансамбля «Подсолнух» под руководством А.М. Ахметовой, студии «Вертикаль». Зажигательный испанский танец «Фламенко»

профессиональный праздник будет отмечаться чуть позже, 22 ноября.

Праздничное оживление в ЦДТ чувствовалось уже с раннего утра. Нельзя было равнодушно пройти мимо красочно оформленных стендов, где был представлен весь творческий материал, раскрывающий деятельность наших специалистов: авторские программы, книги, пособия, научные статьи, публикации...

А в это время в фойе шла акция «Проверь свою речь!», проведения такого ежегодного праздника - повышение престижа нашей важной и нужной профессии. Зрителям показали очень интересную видеозапись опроса жителей города на тему «Кто такой логопед?». Какие только ответы мы не услышали! «Логопед...гм... - это такой... велосипед», - ответила одна девочка. Зал засмеялся, а я подумала: а может, она и права: остановишь движение - потеряешь равновесие, так же и в работе логопеда (Не зря говорят, усняли решение - побежденных на конкурсе не будет! Будет товарищеская ничья, но с присуждением номинаций.

*ВОТ НА СЦЕНЕ* первая команда («Светлячок», «Белочка», «Снегурочка»). Презентацию показали в виде инсценирования пушкинской «Сказки о Царе Салтане». Зрители были в восторге от игры «актеров». Особенно интересен был малыш Гвидон, который сильно картавил. Команда победила в номинации «Мастера своего дела».

работы. Презентация была сделана на высоком уровне. Коллеги по праву получили номинацию «Открытие года».

Всем командам-номинантам были вручены дипломы. Но главным, как признаются сами участники, для них стали аплодисменты зала и минута славы, испытанная на сцене.

*В ТАКОЙ ПРАЗДНИК*, конечно же, не обошли стороной и наших «новичков». Для проведения обряда посвящения на сцену были приглашеисполнила Алия Кулуева из детсада «Светлячок». Всем артистам мы очень признательны!

После концерта гостей пригласили к фуршетному столу. И закончился этот насыщенный день показом фантастического фильма в кинотеатре «Мир».

Прошедший праздник оставил у всех только самые добрые впечатления.

Фарида БИКТИМЕРОВА,
учитель-логопед
коррекционной школы.

Белгес кәңәше

# Балағыҙ дөрөҫ тын алһын

**Күп кенә балалар һөйләшкәндә дөрөҫ тын алмай, шунлыҡтан уларҙың һүҙҙәр әйтелешендә хаталар килеп сыға. Тын алыу гимнастикаһы буйынса күнегеүҙәр һауа менән дөрөҫ идара итеү һәләттәрен үҫтереүгә ярҙам итә. Тәрбиәселәргә һәм ата-әсәләргә балаларҙы кесе йәштән үк дөрөҫ тын алырға, тауышты һауа ағымы менән ашыҡмай сығарырға һәм өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтергә кәрәк.**

Тын алыу күнегеүҙәрен башҡарыу өсөн түбәндәгеләрҙе тәҡдим итәм:

- Күнегеүҙәрҙе эшләр алдынан бүлмәне елләтеп алырға һәм туҙанды һөртөргә кәрәк.

- Тын алыу күнегеүҙәрен тығыҙ итеп киске йәки төшкө аш ашағандан һуң үткәрергә ярамай. Дәрестәр һәм һуңғы ашау араһында ваҡыт бер сәғәт булырға тейеш, ас ҡарынға эшләү тағы ла яҡшыраҡ.

- Күнегеүҙәрҙе иркен, ҡыҫмаған кейемдә эшләү отошло.

- Танау менән тын алырға. Тынды «йомшаҡ» һәм ҡыҫҡа, шул уҡ ваҡытта тәрән итеп алырға, һауаны оҙайлы һәм талғын сығарырға, күнегеүҙәрҙе эшләгәндә ҡул, муйын, күкрәк мускулдарын көсөргәндермәү яҡшы, яурындарҙы күтәрмәҫкә һәм сикәләргә һауа тултырмаҫҡа тырышырға кәрәк.

- Тын алыу күнегеүҙәре ваҡытында ҡайһы бер балалар тиҙ арый, башы әйләнеүе ихтимал. Шуға күрә күнегеүҙәр оҙаҡ булмаҫҡа тейеш (3-5 тапҡыр ҡабатлау етә), уларҙы башҡа күнегеүҙәр һәм уйындар менән аралаштырырға кәрәк.

- Тын алыу күнегеүҙәрен көн һайын үткәреү яҡшы һөҙөмтә бирә, оҙайлығын яйлап 1-2 минуттан 5-7 минутҡа тиклем арттырырға була.

Дөрөҫ тын алырға өйрәтеү өсөн түбәндәге күнегеүҙәрҙе ойошторорға була: мамыҡты, ҡар бөртөктәрен өрөп осороу, өҫтәлдәге ҡәләмде өрөп шылдырыу, күбәләкте осороу, ҡыләүектәге япраҡтарҙы, ҡағыҙ кәмәне өрөп хәрәкәтләндереү һ.б. Балалар был күнегеүҙәрҙе тәүге осорҙа яҡшы итеп башҡара алмай. Улар нык көсәнеп, сикәләрен артыҡ ҡабартып, алдындағы мамыҡҡа, ҡар бөртөгөнә өрөргә тырышып ҡарай, ләкин үпкәнән килгән һауа ағымын сығарып өрә белмәй. Шуға күрә уларҙы тәүҙә иң ябай күнегеүҙәр башҡарырға өйрәтергә кәрәк: ауыҙ аша тын алып, ауыҙҙан сығарыу; танау аша тын алып, танау аша сығарыу; ауыҙҙан тын алып, танауҙан сығарыу һ.б.

Һөйләшкәндә һауаны дөрөҫ һуларға һәм сығарырға өйрәткән күнегеүҙәрҙе башҡарғанда бала үҙенең тын алышын күҙәтергә өйрәнә.

*Айгөл Ураҙбаева,*
*Сибай ҡалаһының*
*«Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы*
*уҡытыусы-логопеды.*

Беҙгә яҙалар

# Баҡсалар гөрләп эшләй

Минең биш йәшлек ейәнем Сибай ҡалаһының «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһына йөрөй. Баҡсаға бик теләп бара, сөнки унда балаларҙы яратыусы һәм аңлаусы тәрбиәселәре бар. Улар бәләкәй генә балаларҙа тыуған илгә, матурлыҡҡа һөйөү тәрбиәләй, ҡатмарлы тормошто аңларға ярҙам итә.

Яңыраҡ миңә тәрбиәселәр Рәзифә Хөрмәт ҡыҙы Иҙрисова, Әлимә Булат ҡыҙы Торсонбаева һәм музыка етәксеһе Рәмилә Абдулхай ҡыҙы Ғөбәйҙуллиналар тарафынан үткәрелгән бик матур сарала ҡатнашыу бәхете тейҙе. Балалар матур итеп йырланы ла, бейене лә, шиғырҙар ҙа ятланы. Ә бит уларҙы өйрәтеү өсөн тәрбиәсе-педагогтарҙан, музыка етәкселәренән күпме сыҙамлыҡ, тырышлыҡ талап ителә.

Ейәнем матур итеп үҙ телебеҙҙә аралаша. Бының өсөн уның тәрбиәселәренә рәхмәтлемен. Балалар баҡсаһын етәкләүсе Таңһылыу Хәләф ҡыҙы Таңғатарованың иңендә уларҙың бөтәһе өсөн дә яуаплылыҡ ята. Уның белдекле етәксе булыуы коллективтың татыу, берҙәм булыуында ла күренә. Ейәнемдең ошо баҡсаға йөрөүенә, уның янында аңлаусы, яратыусы тәрбиәселәре булыуына бик шатмын. Бөтә ата-әсәләр исеменән баҡса коллективына һаулыҡ, бәхет теләйем.

*Ф.С.Байҙегетова,*
*мәғариф отличнигы.*
*Баймаҡ районы, Аҡморон ауылы.*

* * *

Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылын йомғаҡлап, «Ҡарһылыу» балалар баҡсаһында бик матур сара ойошторолдо.

Байрамға абруйлы ҡунаҡтар—Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, «Сулпан» балалар театры режиссеры Зөһрә Фәйзуллина, «Яугүл» халыҡ ансамбле етәксеһе Дилара Рафиҡова, Сибай телевидениеһы директоры Айбулат Уразбахтин, артистар Салауат Вәлиев һәм Айтуған Дәүләткирәйевтар саҡырылғайны. Улар эштәрендә генә түгел, ғаилә ҡарауҙа, балалар тәрбиәләүҙә лә күптәргә өлгө булып тора. Ҡунаҡтарҙың кемеһе йырлап, кемеһе бейеп йыйылыусыларҙың күңелен күтәрҙе. Балалар баҡсаһы мөдире Алһыу Хәйбулла ҡыҙы саҡырылған ҡунаҡтарға рәхмәт хаттары тапшырҙы. Ошондай матур байрамды ойоштороусы Гөлсирә Дәлхә ҡыҙы Сөләймәнова ла оло маҡтауға лайыҡ. Бындай саралар балаларҙа дуҫлыҡ хистәре тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай.

*Ата-әсәләр исеменән—*
*Айгөл Буләкәнова.*

# МӘҒАРИФТЫ ҮҘГӘРТЕП ҠОРОУ ШАРТТАРЫНДА БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА ИКЕТЕЛЛЕКЛЕК ПРОБЛЕМАЛАРЫ ҺӘМ УНЫҢ ҮҪЕШ ЮЛДАРЫ

# ПРОБЛЕМЫ ДВУЯЗЫЧИЯ В ДОШКОЛЬНОМ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОМ УЧРЕЖДЕНИИ И ПЕРСПЕКТИВЫ ЕГО РАЗВИТИЯ В УСЛОВИЯХ МОДЕРНИЗАЦИИ ОБРАЗОВАНИЯ

МАТЕРИАЛЫ МЕЖРЕГИОНАЛЬНОЙ НАУЧНО - ПРАКТИЧЕСКОЙ КОНФЕРЕНЦИИ

## Башҡорт балалар баҡсаһында өндәр ҡуйыу үҙенсәлектәре

**Харисова М.Р.**, Сибай ҡалаһы

Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә өндәр мәҙәниәтен тәрбиәләү иң мөһим урынды алып тора. Өндәр мәҙәниәте тигән төшөнсә үҙенсәлекле һәм киң мәғәнәгә эйә. Балалар баҡсаһында ул түбәндәге йүнәлештәрҙән тора:

- өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше, яһалыу үҙенсәлектәре, телмәр ағышында үҙгәреше һ.б;
- телмәрҙең тасуирлығы (интонация, темп һәм мимика);
- үҙ-ара аралаша белеү ҡағиҙәләрен үҙләштереү кимәле: балалар һөйләшеүенең тыныс, яғымлы тауышлы булыуы, һөйләшкәндә үҙ-үҙен тота белеүе һ.б.

Өндәрҙе ишетә, уларҙың әйтелешен үҙләштерә һәм дөрөҫ тын ала белеү - телмәр барлыҡҡа килеүенең иң мөһим сығанаҡтары булып тора һәм өндәр мәҙәниәте тәрбиәләү эшендә ҙур урынды биләй. Кескәй баланың тәүҙә өндәрҙе ишетеү һәм айырыу һәләте формалаша, аҙаҡ инде уларҙың дөрөҫ әйтелешен үҙләштерә. Өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү баланың телмәр аппаратын нығытыуға, уның һығылмалылығын үҫтереүгә йүнәлтелгән. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен бала өлкәндәр күҙәтеүенә ҡарап, уға оҡшатып уйын аша башҡара. Өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен формалаштырыу өсөн ишетеп ҡабул итеү һәләте мөһим тәүшарттарҙың береһе булып тора. Бала өндәрҙе дөрөҫ ишетә, айыра һәм оҡшатып әйтә белергә өйрәнә.

Башҡорт өндәренең дөрөҫ әйтелешен формалаштырыу эшен баланың йәш үҙенсәлегенә ҡарап, үҙ ваҡытында башлау уңышлы була. Бала менән ни тиклем иртәрәк өндәр өҫтөндә эш ойошторолһа, был эштең һөҙөмтәһе лә шул тиклем нәтижәле була.

Телмәрендә өн кәмселектәре булған балалар менән телмәр ағзаларын өндәрҙе дөрөҫ әйтеүгә әҙерләү, өндәрҙе ҡуйыу, автоматлаштырыу һәм оҡшаш өндәрҙе айырырға өйрәтеү өсөн телмәр аппаратының даими рәүештә аныҡ эшләүе талап ителә. Был йәһәттән эш этаптарға бүленеп алына.

- әҙерлек этабы;
- өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү йәки өндәрҙе ҡуйыу;
- өндәрҙе нығытыу һәм автоматлаштырыу;
- окшаш өндәрҙе айырыу (дифференциациялау).

Әҙерлек этабында баланың телмәр органдарының хәрәкәтсәнлеген, һығылмалылығын, фонематик ишетеү һәләтлеген үҫтереү һәм һөйләшкәндә дөрөҫ тын алыуҙы өйрәтеү өҫтөндә эш алып барыла.

Шуға күрә лә өндәр яһаусы телмәр ағзаларын үҫтереү өсөн даими рәүештә төрлө күнекмәләр башҡартыу һәм уларҙы йыш ҡабатлатып тороу, балаға өндәрҙе дөрөҫ әйтергә яҡшы әҙерлек бирә. Һәр дәрестә артикуляция гимнастикаһын үткәреү мотлаҡ. Балалар менән өндәр яһалышына бағышланған күнекмәләр үткәрелә: ирендәрҙе ялау, телде торба кеүек бөкләп алға сығарыу, телде көрәк һымаҡ сығарыу һәм ошондай башка күнегеүҙәр баланың телмәр органдарының үҫешенә, хәрәкәтсәнлегенә ярҙам итә. Баланың телмәр үҫеше бармаҡ хәрәкәттәренең яҡшы үҫешенә бәйләнгән. Бармаҡ хәрәкәттәренең яҡшы үҫеше бер яҡтан ҡул суҡтарын яҙыуға әҙерләү булһа, икенсенән - тирә-йүндәге предметтарҙы тотоп, һыйпап өйрәтеү ҡоралы ла булып тора.

Икенсе этапта - өндәрҙе ҡуйыу һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү әсән еңел булған өндәрҙән башланып ауыр өндәр менән тамамлана. Тәүҙә һуҙынкы өндәрҙе һәм әйтер өсөн еңел булған ябай тартынкыларҙы ҡуйыу буйынса эш алып барыла. Һәр бала менән индивидуаль рәүештә айырым эшләнелә. Иң тәүҙә өндөң артикуляцияһы асыҡлана һәм уға характеристика бирелә. Ҡуйылған өн тәүҙә ижектәрҙә, һүҙҙәрҙә нығытыла. Өн яһаусы ағзаларҙың үҫешенә төрлө уйындар үткәреү ҙә үтә файҙалы. Уйын аша баланың фонематик, йәғни өн окшатыу, өн айырыу һәләте үҫешә. Педагог теге йәки был ҡошҡа, хайуанға, тәбиғәттә осрай торған төрлө ауаздарға оҡшатып тауыш сығара. Балалар тауыш буйынса уның исемен әйтергә тейештәр. Мәҫәлән, ҫ-ҫ-ҫ - йылан, ҙ-ҙ-ҙ - бал ҡорттары бал йыя һ.б. Ошондай тауыштарға оҡшатып, өндәр сығарып уйнау бала өсөн ҡыҙыҡлы була һәм уны ялҡытмай. Өндөң барлыкка килеү

осоронда, йәки дөрөҫ әйтелә башлау ваҡытында бик иғтибарлы булырға, уның дөрөҫ әйтелешен гел генә күҙ уңында тотоп бала яңылышһа - уны төҙәтеп, дөрөҫ әйтелеше өлгөләрен уның иҫенә төшөрөп тороу кәрәк.

Өсөнсө этапта өндәрҙе автоматлаштырыу - ҡуйылған йәки дөрөҫ әйтелә башлаған өндө һүҙҙәрҙә һәм һүҙбәйләнештәрҙә, һөйләмдәрҙә ҡулланырға өйрәтеү тора. Был бик ҡатмарлы һәм әкренләп, ҙур һаҡсыллыҡ менән алып барыла торған эш: айырым әйтелгән өндө тәүҙә иҗектәр эсендә, шунан һүҙҙә, фразаларҙа дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Аҙаҡтан инде күнегеүҙәр ҡатмарлана.

Предметлы, сюжетлы, сериялы һүрәттәр, мнемотаблицалар буйынса ҡеҫҡәй генә хикәйәләр төҙөтөү, мәҡәлдәр, тиҙәйткестәр, тел төҙәткестәр әйттереү, йомаҡтар уйлап сығартыу һәм сисеү, бирелгән һүҙгә һөйләмдәр төҙөтөү кеүек күнегеүҙәр өндөн бала телмәрендә автоматлаштырылыуына ирешә.

Дүртенсе этапта – оҡшаш өндәрҙе айырыу йәки дифференциациялау тора. Был эш бутап әйтелә торған ике өндө лә бала дөрөҫ әйтә башлағас ҡына үткәрелә. Оҡшаш өндәрҙе бала һәр береһен айырым дөрөҫ итеп әйтә лә телмәр ағышында уларҙы бутай, йә бер-береһе менән алмаштыра. Шуның өсөн был өндәрҙе айырғанда, уларҙың яһалыу юлдарын сағыштырыу һәм айырмаларын билдәләү алымы яҡшы нәтижәләр бирә. Ғөмүмән, өндө автоматлаштырыуға һәм дифференциациялауға бөгөнгө көн талаптарына яраҡлаштырылған яңы технологияларға ҙур иғтибар бирелә.

**Башҡорт балалар баҡсаһында шәхес үҫтереү**

Таңғатарова Т.Х., Сибай ҡалаһы

“Аҡбуҙат” балалар баҡсаһында уҡытыу һәм тәрбиә эше башҡорт телендә алып барыла. Педагогтар коллективының төп бурыстары булып үҙенең телен яҡшы белгән һәм яратҡан, әҙәбиәтен, халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен, уның гөрөф-ғәҙәттәрен, билдәле яҙыусыларын, композиторҙарын, һәм халыҡ геройҙарын белгән яңы Башҡортостан гражданинын тәрбиәләү һәм формалаштырыу тора.

Башҡорт балалар баҡсаһында белем-тәрбиә биреү өсөн тыуған телдә методик әсбаптар етешмәү сәбәпле ижади төркөм тарафынан милли төбәк үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып методик ҡулланмалар әҙерләнде.

1. Мәктәпкәсә йәштәге балаларға художестволы-эстетик тәрбиә биреү маҡсатында Ф.Ғ. Аҙнабаева етәкселегендә “Илһам” методик ҡулланмаһы донъя күрҙе. Был методик ҡулланмала балаларҙың ижадын үҫтереүҙә яңы технологияларға өҫтөнлөк бирелде.

2. Дәүләт теле буларак, башҡорт телен өйрәнеү менән бер рәттән рус телен өйрәнеүгә лә ҙур әһәмиәт бирелә. Шуны

иҫәпкә алып, балалар баҡсаһы педагогтары Кәримова Й.С., Ҡаһарманова Ф.Ф. “Башҡорт балалар баҡсаһында урыҫ телен өйрәнеү” буйынса программа һәм методик тәкдимдәр йыйынтығы әҙерләнеләр. Был программа менән Республикала бөтә башҡорт төркөмдәре тәрбиәселәре лә файҙалана.

3. Башҡорт балалар баҡсаһына йөрөгән балаларҙа өндәр мәҙәниәте тәрбиәләү ҙур урын алып тора. Укытыусы-логопедтар Әминева Р.И., Йылҡыбаева Г.Р., Нарынбаева А.З., Харисова М.Р. тарафынан әҙерләнгән “Тылсымлы өндәр” методик ҡулланмаһында кескәйҙәрҙең йәш үҙенсәлектәренә һәм дөйөм дидактик принциптарға ярашлы өндәр мәҙәниәтен тәрбиәләү бурыстары, эш төрҙәре һәм уларҙың йөкмәткеһе бирелә.

4. Балаларҙың акыл-зиһен һәләтлелеген, интеллектуаль һәм ижади мөмкинселектәрен үҫтереү - эксперимент шарттарында эшләгән “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһынын бер йүнәлеше. Ошонан сығып беҙ балаларға ябай математик төшөнсәләр биреү буйынса бөгөнгө көн талаптарына яраҡлаштырылған методик тәкдимдәр йыйынтығы әҙерләнек. Хәҙерге ваҡытта математик эшмәкәрлектә өҫтәлмә материал итеп эш дәфтәрҙәре әҙерләйбеҙ.

Балаларҙың бөтә төр эшмәкәрлектәрен үҫтереү буйынса “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһында предметлы үҫтереүсе мөхит яңыртылды. Предметлы үҫеш мөхитен булдырыуҙа педагогтар баланың йәш һәм психологик үҙенсәлектәренә ҡарап эш итәләр.

Кесе йәштәге балаларҙың сенсор һәләттәрен үҫтереү өсөн кин мөмкинселектәр булдырылды. Дидактик материалдарҙың сағыу, ҙур, гигиеник талаптарға ярашлы булыуы балаларҙың сенсор төшөнсәләрен байыта. Һәр төркөмдә лә дидактик өҫтәлдәр, һыу һәм ҡом үҙәге, эҙләнеү – тикшеренеү мөйөштәре бар. Төрлө тәжрибәләр үткәргәндә балаларҙа ысынбарлыҡ тураһында тәү төшөнсәләр формалаша, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, әүҙемлек, күҙәтеүсәнлек, фекерләү ҡеүәһе үҫешә.

Театр эшмәкәрлегендә балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү өсөн кире ҡаҡмаҫлыҡ ыңғай шарттар булдырылды:

## Аралашыу мәҙәниәте тәрбиәләү

**Йылкыбаева Г.Р.**, Сибай ҡалаһы

Баланың өлкәндәр һәм тиҫтерҙәр менән һөйләшеп аралашыу теләген тормошҡа ашырыу өсөн шарттар тыуҙырыу – тәрбиәнең һәм белем биреүҙең төп маҡсаты булып тора. Көн тәртибе үтелешендә балаларҙың телмәрен үҫтереүгә бөтә эшмәкәрлектә лә иғтибар итеү кәрәк. Педагог бала менән тәбиғи рәүештә аралашҡанда предметтарҙың атамаларына баҫым яһай (аяҡ һәм өҫ кейемдәре, һауыт-һаба, йоҡлау һәм йыуыныу кәрәк-яраҡтары). Уларҙың сифатын билдәләгәндә һәм улар менән хәрәкәттәрҙе үтәгәндә балаға шул һүҙҙәр менән эш итергә өйрәтә. ("Бүректе ал", "Тәрилкәне яҡыныраҡ ҡуй", "Үҙеңдең тарағыңды алып кил", "Ҡулдарыңды һабын менән йыу" һ.б.)

Бала үҙ-үҙен хеҙмәтләндергәндә үҙе башҡарған эште телмәр аша әйтә белеүен өйрәтеүҙә эҙмә-эҙлеклелек кәрәк. Шуның өсөн дә педагогтың балалар менән аралашыуы ошоно иҫәпкә алып төҙөлә.

Кескәйҙәрҙең өлкәндәр һәм тиҫтерҙәре менән аралашҡанында үтенес һәм тәҡдим итеү һүҙҙәрен ҡулланыу ғәҙәтен тәрбиәләү кәрәк ("Зинһар өсөн, ишекте ас", "Минең ҡыҙым булырһың" һ.б.), сөнки тылсымлы һүҙҙәр ярҙамында үҙ-ара аралаша белеүгә нигеҙ һалына.

Ягымлы итеп һаулыҡ һорашыу, икенсе кешенең сәләмләүенә яуап биреү, үҙеңдең үтенесеңде ягымлы итеп аңлата белеү, рәхмәт әйтеү кеүек аралашыуҙың ябай ғына ысулдарын формалаштырыу мөһим. Балаларҙың телмәрен үҫтереү уйындарҙа ҙур мөмкинселектәр бирә. Шуның өсөн кескәй төркөмдән үк педагог балаларҙы бер-береһе һәм өлөлар менән аралашҡанда ягымлы, тыныс тауыш менән һөйләшергә өйрәтә.

Балаларға телмәр ярҙамында, көнкүрештә һәм үҙ-аллы уйындарҙа бер-береһе менән аралашырға һәм бәйләнешкә инергә ярҙам итеү нәтижәле була. Тиҫтереңең эшмәкәрлегенә



дуҫтарса мөнәсәбәт тәрбиәләү - аралашыуға ҙур йоғонто яһай. Икенсе балалар менән йәки улар менән эш башҡарыу ниндәйҙер (китап ҡарау, һүрәт төшөрөү һ.б.) теләген үҫтереү балаларҙа үҙ-ара аралашыуға ынтылыш уята. Педагогтың бер бала менән һөйләшеүе әкренләп 2-3 бала бала менән әңгәмәләшеүгә, аҙаҡ - уйынға күсә.

Маҡсатҡа йүнәлтелгән эш саф һауала йөрөгән ваҡытта ла тормошҡа ашырылырға тейеш. Саф һауала йөрөүҙең йөкмәткеһе ни тиклем яҡшыраҡ уйланылған булһа, ул балаларҙың телмәрен аралашыу һәләтен шул тиклем күберәк байыта, файҙалы һәм фәһемле була, үҙ-ара мөнәсәбәттең ыңғай формалашыуына тәьҫир итә.

## Балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү

**Кәримова Я.С.**, Сибай ҡалаһы

Ижади шәхес формалаштырыу – хәҙерге заман педагогикаһында фәнни һәм практик бурыстарҙың иң мөһимдәре булып тора.

Ижади шәхес – бөтә йәмғиәт мираҫы.

Мәктәпкәсә йәштәге осор – бик ҙур потенциаль мөмкинселектәр мәле ул. Был ваҡытта шәхестең үҫеше өсөн тәүшарттар булдырыла.

Эшмәкәрлек һөҙмтәһендә яңы рухи ҡиммәттәр тыуһа ғына, ул ижади эшмәкәрлек була. Ул эҙмә-эҙлекле бара һәм йәш үҙенсәлектәренә ҡарап әкренләп үҫешә. Ижади шәхес үҫтереүҙә иң эффектлы сараларҙың береһе – һынлы сәнғәт эшмәкәрлеге. "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы коллективы бала-



ларҙың шәхесен эмоциональ-әхлаҡи яҡтан формалаштырыуҙа сәнғәттең мөмкинселектәрен асыу бурысын үҙ эсенә алған "Илһам" методик ҡулланмаһы әҙерләне. Был ҡулланма балаларға үҙҙәрен уратып алған донъяны художестволы, эстетик ҡабул итергә ярҙам итә, сөнки был дәүерҙә баланың аҡыл-зиһен һәләтлелеге үҫешә, донъяға ҡарашы формалаша.

Балалар баҡсаһында ижади шәхес тәрбиәләү буйынса эштәр, бала үҙенең һәләттәрен өлкәндәр яғынан бер ниндәй баҫымһыҙ үҙләштерә алырлыҡ итеп ойоштоpола. Әммә балаларҙың ижади эшмәкәрлеге менән идара итеү педагогтарҙан уларҙың ижад итеү үҙенсәлектәрен белеүҙе, үҙҙәренең профессиональ оҫталыҡтарын үҫтереүҙе талап итә. Бының өсөн тәрбиәселәргә төрлө семинарҙар, консультация – практикумдар, педсәғәттәр, эшлекле уйындар тәҡдим ителә.

Күҙәтеүҙәр раҫлауынса, бала үҙенең ижадын, ҡағыҙҙа булараҡ, телмәр менән алып бара. Йәш рәссам эшләгән эшен атап әйтә, һүрәтләгән персонаждарҙың характерҙарын аңлата, үҙенең эш барышын һөйләй. Былар барыһы ла балаға үҙ эшен планлаштырырға, анализларға. Эш сифатын аңларға ярҙам итә. Шуға күрә ижад итеү барышында балаларҙың йәнле аралашыуын һис тә тыймайбыҙ. Беҙҙең аңлауыбыҙса, балаларҙың һәм тәрбиәселәрҙең ижади хеҙмәттәшлеге яңы асыштар шатлығы һәм үҙ-ара аралашыуҙа бер-береңде аңлау ҡыуанысы тыуҙыра.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп кенә балаларҙа ижади һәләттәр үҙ-аллы барлыҡҡа килмәй һәм үҫешмәй. Художестволы ижад итеү һәләтен үҫтереү өсөн кәрәкле шарттар булдырырға кәрәк. "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында бындай шарттар тыуҙырылған.

1. Махсус ойошторолған дәрестәрҙә төрлө традицион булмаған һүрәтләү алымдары, материалдары ҡулланыла.

2. Уйын эшмәкәрлеге төп урынды алып тора.

3. Театр һәм музыкаль, конструктив эшмәкәрлектәргә айырыуса иғтибар бирелә.

Былар барыһы ла балаларҙың тормошона йәм өҫтәй, төрлө яҡлап шәхес булып үҫеүенә булышлыҡ итә.

4. Балалар баксаһында художестволы-эстетик үстереүсе мөхит булдырылған. Предметлы – үстереүсе мөхит булдырыуҙа балалар үҙҙәре лә актив ҡатнаша, ата-әсәләр ҙә ярҙам итә. Педагогтар менән берлектә төркөм бүлмәһен биҙәйҙәр, декорация элементтары, театр тамашалары өсөн костюм өлөштәрен әҙерләүҙә ҡатнашалар. Даими рәүештә балаларҙың эштәренән күргәҙмәләр, конкурстар ойоштороло.

5. Һәр ваҡыт вариатив алымдар ҡулланыла. Балаларҙы өйрәтеү формалары, алымдары, ысулдары, тәкдим ителгән материалдар даими алмаштырылып тора.

6. Тәрбиәселәр менән балалар, төркөмдәр араһында ижади хеҙмәттәшлек традицияға әйләнгән.

7. Һынлы сәнғәт, музыкаль һәм театр эшмәкәрлектәре, телмәр, уйын һәм башҡа ижади эшмәкәрлектәр өсөн материалдар һәм эш формаларын милли-төбәк үҙенсәлектәренә таянып һайланыла, төбәк традициялары, ғөрөф-ғәҙәттәре иҫәпкә алына.

Ижади эшмәкәрлек өсөн мөһим булған психик үҙенсәлектәр һәм сифаттар үстереүгә айырым урын бирелә. Дөйөм психик процестар (күҙаллау, күҙ алдына килтереү, уйлап сығарыу, ҡыҙыҡһыныу, хәтер һәм иғтибар, ритм һиҙемләүе) үстереү б алаларҙын ижад итеүенә ыңғай йоғонто яһай. Балалар баксаһында педагог-психолог эшләй. Ул балаларҙың дөйөм психик үсешенә анализ яһай. Диагностика уҡыу йылына ике тапҡыр үткәрелә һәм һығымталар яһала.

Шулай итеп, "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында уратып алған донъяға ижади ҡараш үстереү өсөн бөтә мөмкинселектәр ҙә булдырылған һәм ошо йүнәлештә баһаға лайыҡ һөҙөмтәле эштәр башҡарыла.

# Балаларҙың телмәрен үҫтереү

**Ф.Г. АҘНАБАЕВА,**
Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты методисы

Телмәр – төп аралашыу сараһы һәм фекерләү формаһы. Дөрөҫ телмәр төҙөй белеү – мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың төрлө яҡлы үҫеше өсөн мөһим шарт. Ошо осорҙа баланың аң кимәле үҫешә, тәүге ҡыҙыҡһыныуы барлыҡҡа килә, тирә-йүндәге ябай бәйләнештәр тураһында белеме формалаша. Баланы тирә-йүн менән таныштырыу телмәр үҫтереү менән бергә алып барыла.

Телмәр һәм танып белеү әүҙемлеген үҫтереү

- Туған телдә дөрөҫ һөйләшергә һәм аралашырға өйрәтеү
- Тирә-йүн менән таныштырыу
- Балаларҙың аң-зиһенен үҫтереү
- Башҡорт халҡының теленә, тарихына, мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләү
- Системалы эш алып барыу

Телмәр үҫтереүгә түбәндәге бурыстар ҡуйыла:

**1. Туған телде үҙләштереүгә ыңғай шарттар булдырыу.**

**2. Танып белеү һәм ижади һәләт үҫтереү нигеҙҙәрен формалаштырыу.**

**3. Танып белеү әүҙемлеген үҫтереү.**

Балаларҙың телмәрен үҫтереү уҡытыу-тәрбиә эшенең айырылғыһыҙ бер өлөшө. Республикала уҡытыу-тәрбиә программаһы буйынса методик әсбаптар етешмәү сәбәпле, тәрбиәселәргә телмәр үҫтереү эшмәкәрлеген ойошторауҙа ҡыйынлыҡтар тыуа. Быны иҫәпкә алып, балалар баҡсаһының ижади төркөмө Ф.Г. Аҙнабаева етәкселегендә "Гөлбостан" методик ҡулланмаһын баҫтырып сығарҙы. Уға методик күрһәтмәләр, йыллыҡ эш планы, яҡынса дәрес өлгөләре һәм диагностика материалдары индерелде. Методик әсбапта милли рух тәрбиәләүгә, халыҡ мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары һәм тарихы менән танышыуға ярҙам итерлек әҙәби әҫәр, әкиәт, йыр, шиғыр һәм башҡа халыҡ ижады ҡулланылды.

Тәрбиәселәр методик әсбапҡа таянып календарь-перспектив план төҙөй, телмәр үҫтереү эшен системаға һала. Телмәр үҫтереү дәрестәрендә

– мнемотехника;
– моделдәр менән эш итеү;
– терәк-схемалар;
– модель-схемалар;
– Н.А. Зайцевтың М.Ш. Әхмәҙиева авторлығында сыҡҡан башҡорт телендә тиҙ уҡырға өйрәтеү алымы;
– әкиәттәрҙе коллаж ярҙамында һөйләргә өйрәтеү кеүек яңы алымдар киң ҡулланыла.

Ғөмүмән, балаларҙы таҙа, асыҡ, грамоталы һөйләргә өйрәтеү башҡорт халҡына ғына хас өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеүҙән башлана. Башҡорт өндәре буйынса уҡытыусы-логопед Г.Р. Йылҡыбаева, А.З. Нарынбаева, М.Р. Харисова һәм Р.И. Әминевалар "Тылсымлы өндәр" исемле методик ҡулланма әҙерләне. Хәҙерге көндә был китап менән Башҡортостандағы бөтә башҡорт балалар баҡсалары ла файҙалана.

Экспериментта телмәр үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе бармаҡ, дидактик уйындар, түңәрәк эштәре киң ҡулла-

ныла. "Иле барҙың теле бар, теле барҙың иле бар" түңәрәгендә балалар шиғыр ятлау ысулдары менән таныша. Тәжрибәле тәрбиәсе Г.М. Йыһангирова түңәрәк эшендә үҙе ижад иткән шиғырҙарҙы ихлас ҡуллана. Уның кескәйҙәр өсөн яҙған шиғырҙары "Минең яҡын дуҫтарым" исемле китапҡа тупланды.

Ижади эҙләнгән тәрбиәселәр Р.Г. Ямантаева һәм Г.М. Йыһангирова "Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн иң яҡшы методик әсбап" конкурсында ҡатнашып, республикала 3-сө урынға сыҡты. Конкурс материалы "Гөлсәсәк" әҙәби йыйынтығында донъя күрҙе.

Эксперимент шарттарында телмәр үҫтереү эшен системалы һәм һөҙөмтәле ойоштороу – педагогтарҙың профессиональ оҫталығын үҫтереүҙе күҙ уңында тота. Был йүнәлештә балалар баҡсаһында маҡсатҡа ярашлы эш башҡарыла. Мәҫәлән, педагогтар өсөн ҡала һәм республика кимәлендә квалификация үҫтереү курстары, семинар һәм конференциялар даими ойошторолһа, балалар баҡсаһында педсовет, семинар-практикум, конференция, консультация һәм алдынғы эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу системалы рәүештә үтә. Мәҫәлән,

✓ "Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы дөрөҫ һөйләшергә өйрәтеү" темаһына педсовет;

✓ "Уйын һәм күнегеүҙәр ярҙамында һүҙ байлығын арттырыу" темаһына семинар;

✓ "Театр уйындары аша бәйләнешле телмәр үҫтереү", "Балаларҙың ижади һөйләү һәләтен үҫтереү" темаһына консультация;

✓ "Шиғыр ятлау алымдары", "Һүрәт буйынса хикәйә төҙөү" темаһына консультация-практикум;

✓ "Телмәр үҫтереү мөхитен булдырыу" конкурсы бик фәһемле үтте.

Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә ата-әсәләрҙең роле бик ҙур. Шуға күрә эште уларҙың башҡорт телен белеү кимәлен асыҡлауҙан башланыҡ. Һөҙөмтәлә түбәндәгеләр асыҡланды:

– башҡорт телен яҡшы белгән һәм иркен аралашҡан ата-әсә – 80%;

– башҡорт телен аңлаған, әммә аралашыуҙа ҡыйынлыҡтар кисергән ата-әсә – 13%;

– башҡорт телен аңламаған йә бөтөнләй белмәгән ата-әсә – 7% тәшкил итә.

Ғөмүмән, ата-әсәләр төрлө йыйылыш һәм конференцияларҙа әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, "Йәншишмә" клубы ағзаларының "Телетапшырыу йә компьютер уйындарының бала телмәренә йоғонтоһо" тип аталған сираттағы ултырышы һөҙөмтәле үтте.

Шулай итеп, "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында аң-кимәле үҫешкән, үҙ туған телен яҡшы белгән, рухлы шәхестәр тәрбиәләүгә күп көс түгелә.

Кескәй дуҫтарыбыҙҙа

# «Аҡбуҙат»тар ниңә шаттар?

Сибай калаһының «Акбуҙат» балалар баҡсаһына йөрөүсе кескәйҙәрҙең бәләкәйҙән үҙ телебеҙҙә һөйләшеп-аралашып, туған тел нескәлектәрен, уның матурлығын тойоп үҫеүе үҙен ысын башҡорт итеп һанаған һәр кемде кыуандыралыр, моғайын. Бер катлы сабыйҙарҙың саф башкортса тәтелдәүҙәре, үҙебеҙсә уйнарға, йырларға, бейергә өйрәнеүҙәре үҙе ни тора! Тәрбиәселәр Мәүлиҙә Рафиҡ ҡыҙы Харисова менән Йәмилә Сәйфулла кыҙы Кәримовалар етәкләгән «Һнйылар» ансамблен генә алып карайык. Урыҫ телле баҡсала балалар шулай оҫта йырларға һәм бейергә өйрәнә. алырҙар инеме ни? Үҙ эшенә мөкиббән бирелгән тәрбиәсе апайҙары һәм музыка етәксеһе Рәмилә Әбделхәй ҡыҙы Ғәбәйҙуллина, тәбиғи һәләте булған һәр баланы ҡанат аҫтарына алып, тәүге сәнғәт һабаҡтарын бирә, сәхнә серҙәренә өйрәтә. Эшләһәң, эш ҡарышмай бит инде ул. Ана, курсаҡ кеүек кейенгән кескәй кыҙҙар ололарса етдилек менән ниндәй кыйыу һәм оҫта сығыш яһайҙар. Ул зыңлатып йырлап ебәрһендәрме, ул тыпыр-тыпыр бейеп китһендәрме — шундай килешеп, урынеренә килеп кенә тора.

Һәүәҫкәр композитор Әлфиә Зиннурова менән кескәйҙәр өсөн яҙылған китаптар авторы Инга Илембәтова апайҙары үҙҙәренә ҡунаҡҡа килгән көндө лә һынатмаңы «Һнйылар» ансамбле. Уйнап-көлөп, йырлап-бейеп зыҡ купты балалар. Музыка мәктәбендә шөғөлләнеүсе олораҡ апай-ағайҙары ла ҡушылғас, осрашыу тотош бер байрамға әйләнде. Инга Илембәтова, Гүзәл Ситдиҡова, Рәсимә Ураҡсиналар һүҙҙәренә Әлфиә Зиннурова яҙған йырҙарҙы йырлап кинәнделәр улар. Йыр араһында бейеп алырға ла форсат күп булды. Етмәһә, Әлфиә һәм Инга апайҙары үҙҙәренә «Бесәй» исемле ер-яңы йыр һәм «Киндер тукмау» тип аталған ҡыҙыклы уйын да өйрәтеп китте. Тәрбиәсе апайҙары ла ҡуша йырлап, бергә бейеп, үҙҙәре менән бергә уйнап йөрөгәс ни, бәләкәстәрҙең кыуанысы ярҙарынан ашты. Ситтән ҡарап ултырған ололар ҙа хатта уларға ҡушылмайынса булдыра алманы.

Киса аҙағында ҡунаҡтар балаларга бүләккә китаптар таратып, тағы ла осрашырға һүҙ биреп һаубуллашты.

З. КИРЙӘНОВ.

МӘҒАРИФ

# *Балаларға тыуған телен бишектән өйрәтә башлайыҡ*

Әсә теле балаларҙың мейеһенә балалар баҡсаһынан уҡ һеңә барырға тейеш.

Беҙҙең Сибай ҡалаһында бөтәһе 18 балалар баҡсаһы бар (тик әлеге көндә «Алтынсәс» исемлеһе эшләмәй). Уларҙа барыһы 2930 бала тәрбиәләнә, шуларҙың 1564-е башҡорт милләтенән. 14 балалар баҡсаһында 41 төркөмдә 878 башҡорт балаһы тәрбиә эшен һәм белем алыуҙы тыуған телендә үҙләштерә.

Былтыр 2 сентябрҙә «Аҡбуҙат» исемле башҡорт балалар баҡсаһы асылды. Бында 205 бала тәрбиәләнә һәм белем ала. Ул төркөмдәр 8-се мәктәпкә әҙер башҡорт кластары булып баралар.

Тәрбиәселәрҙең белем кимәле аҙаҡҡы 2-3 йылда ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе: 88 тәрбиәсенең 24-е юғары, ҡалған 64-е махсус урта белемле. Был балаларҙы тыуған телдә тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелеүен һәм был тәңгәлдә эш кимәленең күтәрелеүен аңлата. Хәҙер Сибай пединститутында ситтән тороп уҡыусылар һаны арта бара.

Ҡала мәғариф бүлегенең планы нигеҙендә балалар баҡсаларында ай һайын методик берекмә саралар үткәреп тора.

«Светлячок», «Мишутка», «Березка», «Айгөл», «Аҡбуҙат» баҡсаларында балаларҙың белем кимәленең үсешенә һәм мәктәпкә әҙерлегенә ыңғай өлгәшәләр. Бигерәк тә «Аҡбуҙат», «Снегурочка» баҡсаларында эшләгән психологик-медик-педагогик комиссияларының эшенә ыңғай баһа бирергә була. Улар яңы ысул ҡулланып, йәғни, «Йәйгор» программаһына таянып һәм Зайцевтың тиҙ уҡыу методикаһын ҡулланып эшләйҙәр. Был осраҡта тәрбиәселәрҙән К.М.Арыҫланова («Снегурочка»), К.А.Ҡәйепҡолова («Ләйсән»), Ф. Х. Ғәрифуллина («Мишутка»), Ф.Г.Сабитова («Белоснежка»), И.С.Кәримова («Аҡбузат»), Г.Ф.Саяноваларҙың («Березка») исемдәрен хөрмәт менән билдәләргә кәрәк.

Һүҙ кадрҙар тураһында барғанда тәрбиәселәрҙең аттестацияға әҙерлеген урап үтеп булмай. Аттестация һәләтле тәрбиәселәребеҙҙең исемдәрен асты, уларҙың ижади ынтылыштарын күрһәтте. Аттестацияны 256 тәрбиәсе үтте, шуларҙың 6-һына юғары категория бирелде. Улар араһынан «Айгөл» балалар баҡсаһынан Н. Х. Дәүләтколова рус төркөмдәрендә башҡорт телен өйрәтеү буйынса үҙ программаһын төҙәнә һәм ул ҡала күләмендә киң ҡулланыу тапты. Шулай уҡ «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы тәрбиәселәре Р. И. Әминева һәм Г. Р. Йылҡыбаева өлкәндәр төркөмөндә «Таблицалар һәм шаҡмаҡтар» ярҙамында тиҙ уҡырға өйрәтеү буйынса методик күрһәтмәләр өҫтөндә эшләйҙәр.

Талантлы, ижади эшләүселәрҙең исеме уҡыу йылы барышында асыҡлана. Быға бигерәк тә «Тәрбиәсе-95» һәм «Тәрбиәсе-96» бәйгеләре ярҙам итте. Конкурсҡа ҡатнашҡан 18 тәрбиәсенең 9-ы башҡорт төркөмдәрендә эшләүе һәм шуларҙың 4-һе призлы урындарҙы яулауы беҙҙең милли төркөмдәрҙә эш кимәленең насар булмауын күрһәтә. Сибайҙа 6 район тәрбиәселәре араһында үткән зона бәйгеһенә 3-сө урынды яулаған «Белочка» балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Гөлгөнә Хәмитова республика бәйгеһендә ҡатнашты һәм «Халыҡ мәғарифы отличнигы» тигән исемгә лайыҡ булды.

Икенсе йыл инде башҡорт төркөмдәрендәге тәрбиәселәрҙең методик берекмәһе уңышлы эшләй. Уның етәксеһе — «Светлячок» балалар баҡсаһы методисы — Лилиә Янбаева. Берекмә тәрбиәселәргә методик ярҙам итеүгә һәм тәжрибәләр менән уртаҡлашырға, эш кимәлдәрен күтәрергә ярҙам итә. Балалар баҡсаһынан мәктәпкә нисә бала һәм шуларҙың күпмеһе башҡорт класына барғаны һәр ваҡыт күҙ уңында тотола, был ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Былтырғы уҡыу йылында башҡорт төркөмдәренең 98 проценты башҡорт кластарына барҙылар.

Методик берекмә Сибай Яҙыусылар ойошмаһы менән дә тығыҙ эшләй, улар менән бер-нисә осрашыу үткәрҙек. Шулай уҡ «Сулпан» балалар театры һәм рәссамдар менән дә бәйләнешкә инергә кәрәк, тип уйлайбыҙ.

Әлбиттә, балалар баҡсаларындағы милли төркөмдәр эшендә проблемалар ҙа етерлек. Мәҫәлән:

— методик ҡулланмалар, айырым программалар юҡ, бөтә эште рус теленән тәржемә итеп эшләргә мәжбүрбеҙ;

— башҡорт музыка белгестәре етешмәй.

Шуға күрә лә Н. Х. Дәүләтколова төҙөгән программаны ҡала типографияһында баҫтырып таратыу фарыҙ.

Йәнә шуны әйтергә кәрәк: ҡала телевидениеһының башҡорт редакцияһы балалар баҡсаларының тормошон, тәрбиәселәрҙең эштәрен сағылдырыусы тапшырыуҙар ойоштора, яҡшы булыр ине.

**Ф. АҘНАБАЕВА,**
ҡала балалар баҡсаларының методик берекмәһе етәксеһе, «Аҡбуҙат» башҡорт балалар баҡсаһы мөдире.

Вести из школ

# И мы не лыком шиты

В средней школе № 8 прошла методическая неделя, которая явилась итогом работы всех учителей школы, своеобразным отчетом достижений в педагогике и методике преподавания, успехов всех и каждого.

Судя по отзывам присутствующих, профессиональная подготовка педагогических кадров в школе довольно высока. Тема методической недели «Воспитание и обучение на национальных традициях башкирского и русского народов» выбрана не случайно. Это и требование сегодняшнего времени, и традиций школы, в которой с первых дней открыты классы с обучением на башкирском языке. В течение методической недели были показаны фольклорные праздники «Навруз», «Талая вода» на башкирском языке, «Полюбуйся, весна идет», «Чистый четверг» на русском языке, утренники, прошли классные часы, встречи с ветеранами Великой Отечественной войны, посвященные 50-летию Победы, на башкирском и русском языках. Все они отличались внимательным, бережным отношением к культуре народа, уважением к личности каждого ученика. Особенно удачными были уроки Т. С. Юламановой, З. С. Рафиковой, Л. И. Мясниковой, Г. Ш. Татлыбаевой, И. Р. Ялмурзиной, Ф. Г. Саттарова, Б. А. Магадеевой.

В понедельник, в заключение дня, был показан фольклорный праздник «Навруз», в котором участвовали все. Больше всего дети были удивлены тому, что учителя могут не только обучать, но еще и петь, плясать. Этот праздник был подготовлен учителями Г. Г. Мурсалимовой, З. Г. Худайгуловой, Р. Г. Нурмухаметовой, А. Р. Ягудиной.

Вторник был посвящен совместной работе школы и яслей-сада «Дюймовочка». Эта работа проводится в течение ряда лет. Учителя школы ведут в «Дюймовочке» занятия по живописи, иностранному языку, ритмике, башкирскому языку, по инициативе БИПКРО открыты два первых класса по системе В. Зайцева. Слушателей БИПКРО, учителей школ города заинтересовали уроки В. Ф. Хайдаровой, С. Р. Тляубаевой, так как технология развивающего обучения очень эффективна. Кроме этих уроков были показаны фольклорные праздники «Чистый четверг», «Талая вода» учащимися первых классов и работницами детского сада В. В. Карповой, Я. С. Каримовой, Р. З. Губайдуллиной и другими.

Постарались не ударить в грязь лицом учителя и в среду. Хорошие отзывы получили уроки Т. В. Баскаковой, С. А. Кужахметовой, Г. Г. Мурсалимовой, З. Г. Худайгуловой, Р. Б. Рахимова, З. И. Байсуваковой и других. Понравилась встреча в школьном музее с ветеранами Великой Отечественной войны, подготовленная учителем истории Р. Р. Юлановой, утренник «Песни, опаленные войной», проведенный в классе Ф. М. Беловой.

Четверг был отдан учителям математики и физики, экономики и начальных классов. Учителя подготовили разнообразные уроки, семинары, соревнования, которые получили хорошие отзывы гостей. Л. Г. Спигина, Р. Ф. Каримова, С. С. Ефремова, Ф. С. Ризванова, Г. С. Хакимов порадовали городских учителей математики своими успехами, достижениями. Хорошо отозвались об уроках учителей Р. Ф. Якупова, М. К. Сулейманова, О. В. Куваевой. На протяжении всей недели для гостей была организована выставка учащихся, которые буквально из ничего сшили и связали неплохие поделки.

Завершилась методическая неделя. Продолжаются школьные будни. Но коллектив школы убедился сам и убедил других в том, что работать может, что у него достаточно возможностей и опыта, чтобы быть не хуже других.

**Р. ИШНИЯЗОВА,**
**заместитель директора по учебно-воспитательной работе школы № 8.**